Кеше - ул үҙе бер донъя

# Хазина

№6 (234)

“Караидель” район гәзите ҡушымтаһы
Айына ике тапҡыр сыға, шәмбе, 30 март, 2013 йыл


**Ҡотлайбыҙ!**

## Премия лайыҡлы эйәһен тапты



**Башҡортостан Республикаһы Президенты ҡарарына ярашлы, Сафуан Әлибаев (Сафуан Әлибай) балалар һәм үсмерҙәр өсөн әҙәбиәт һәм сәнғәт өлкәһендәге Һәҙиә Дәүләтшина исемендәге дәүләт премияһы лауреаты исеменә лайыҡ булды.**

Башҡортостан Республикаһының балалар һәм үсмерҙәр өсөн әҙәбиәт һәм сәнғәт өлкәһендәге Һәҙиә Дәүләтшина исемендәге дәүләт премияһы 2005 йылдың 1 октябрендә булдырылды. Был ваҡыт эсендә балалар өсөн ижад иткән һигеҙ әҙип лауреат исемен алды. Сафуан Әфтах улына абруйлы премия “Һайланма әҫәрҙәр. II том” китабы өсөн тапшырылды. яҙыусыны ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ.

**Тормош һулышы**

## Дуҫлыҡ күпере һынмаһын

**Ошо көндәрҙә Мәскәүҙәге Дәүләт Кремль һарайында “Дуҫлыҡ күпере: Мәскәү - Өфө – Ҡазан” тип аталған үҙенсәлекле концерт уҙғарылды. Бай йөкмәткеле тамашала Башҡортостандың һәм Татарстандың күренекле сәхнә оҫталары ҡатнашты.**

Берҙәмлеккә тау ҙа ҡыҙыҡҡан, тиҙәр халыҡта. Ике туғандаш халыҡтың Рәсәйҙең төп сәхнәһен дер һелкетеүе – үҙе оло шатлыҡ. Береһенән-береһе моңло йырҙар, дәртле бейеүҙәр мәскәүҙәрҙең күңелен елкендермәй ҡалмағандыр.

Сағыу тамашала Башҡортостандан Айҙар Ғәлимов, Римма Амангилдина, Марат Шәрипов, Ришат Төхвәтуллин сығыш яһаны.

- Сара юғары кимәлдә үтте, - тип тәьҫораттары менән уртаҡлашты Башҡортостандың халыҡ артисы Римма Амангилдина. – Унда ҡатнашыусылар араһында дуҫлыҡ хисе шул тиклем бөркөлөп торҙо. Уның уңышлы ойошторолоуы өсөн Татарстандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, режиссер Хәлисә Исмәғилеваға ҙур рәхмәтебеҙҙе белдерге килә.

Әйткәндәй, дуҫлыҡ байрамына әүерелгән концертта билдәле кино актеры Марат Бәшәров, тәүге тапҡыр татар телендә йырлап, күптәрҙе ҡыуандырҙы.

**Матбуғат дуҫтары**

## Халыҡтың ихтирамын яулаған



Ә.Мөхтәсәров фотоһы.

Гүзәл Мөғлөтдинова был ауылда барыһының да үҙ кешеһенә әүерелгән.

**Баймаҡ районы Күсей ауылында тыуып үҫкән Гүзәл Мөғлөтдинова 1995 йылда Яңы Йәнсәйеткә килен булып төшкән. Ғаиләһендә хәстәрлекле, уңған әсәй, эшендә талапсан, һәр нәмәне еренә еткереп башҡарыусы хеҙмәткәр. Ауылдаштары өсөн ярҙамсыл, сабыр, ғәҙел, ихлас күңелле, алсаҡ йөҙлө ҡатын-ҡыҙ, әхирәт.**

Гүзәл Мөхәммәт ҡыҙы 2006 йылдан башлап почта начальнигы вазифаһын үтәй. Ысынлап та, әгәр һөнәреңде яратмаһаң, халыҡ өсөн үҙеңде яуаплы итеп тоймаһаң, ышанысын аҡламаһаң, тормошта ла, хеҙмәттә лә уңыштарға эйә булыу мөмкин түгелдер ул. Яңы Йәнсәйет элемтә бүлексәһенә Сәбек, Ҡыҙылкүл, Октябрьский ауылдары инә.

- Эшемде яратып башҡарам. Почта саҡ ҡына һуңлаһа ла күңелем ашҡына башлай. Ауылдаштарыма гәзит-журналдарҙы үҙем еткерәм, арьяҡта урынлашҡан ауылдарҙа Алена Алеева тарата, хат-хәбәрҙәрҙе ваҡытында өлгөртөргә тырышабыҙ. Өлгәшкән уңыштарымда ауыл халҡының өлөшө ҙур. Шуға барыһына ла рәхмәтлемен, - ти Гүзәл.

Г.М.Мөғлөтдинованың тырыш хеҙмәте йылдар үтеү менән үҙ баһаһын да ала. Ул район элемтә бүлегенең Маҡтау ҡағыҙҙарына, Рәхмәт хатына лайыҡ булған.

Улар тормош иптәше Әхмәт Мөктәсим улы менән Гөлфиә менән Айсарҙы тәрбиәләй.

Тормошҡа, матурлыҡҡа, тәбиғәткә, туған телебеҙгә ғашиҡ Гүзәлдең йәшендәй йәшнәп йәшәр, эшләр сағы алда әле.

**Л.Карамова.**

**Демография**

## *РФ Президенты Владимир Путин:*

## «Күп балалы ғаилә ҡабаттан Рәсәй символына әүерелергә тейеш»

**Март айында Владимир Путин демография сәйәсәтен һәм өҫтөнлөклө милли проекттарҙы тормошҡа ашырыу буйынса совет ултырышы үткәрҙе. Демография мәсьәләләренә арналған ултырышта хәл-торошо яҡшыртыуға йүнәлтелгән һөҙөмтәле саралар хаҡында һүҙ барҙы.**



Айырыуса күп балалы ғаиләләргә булышлыҡ итеү программаларына баҫым яһалды. Быға, әлбиттә, торлаҡ төҙөү өсөн ер участкалары бүлеү, «әсәлек капиталы” буйынса түләү инә. Хөкүмәттә тиҙ арала етем балаларҙы үҙебеҙҙең ватандаштар тарафынан уллыҡҡа алыу процедураларын ябайлаштырыу сараһын күрергә ҡушылды.

Бынан тыш, Президент инвалид бала тәрбиәләүсе эшләмәгән ата-әсәләргә түләүҙәр арттырылыуы хаҡында Указға ҡуйыуы хаҡында ла белдерҙе. Һандарға туҡталғанда, бер аҙ кәйефте күтәрерлек күрһәткестәр ҙә бар, әммә демография беҙҙә киҫкен мәсьәлә булып ҡала.

“Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы белгестәренең 2000 йылда эшләнгән фаразына күҙ һалһаҡ, улар: «Рәсәйҙә халыҡ 133 миллионғаса ҡыҫҡарасаҡ», тигән һығымтаға килгән. Бөгөн илдә 143 миллиондан ашыу кеше йәшәй. Был, фараздарға ҡарағанда, ун миллионға артыҡ”, - тине Владимир Путин совет ултырышын башлағанда.

Әммә ошо һан ҡәнәғәтләнеп туҡталырға тигәнде аңлатмай әле. Демография хәл-торошон һәр төбәктә, өҫтөнлөклө йүнәлеш булараҡ, контролдә тоторға һәм уның яхшырыуына булышлыҡ итеүсе саралар күреү мөһим.


*(Аҙағы 2-се биттә.)*


## *«Хазина» менән бергә!*




***Гәзитебеҙ - дуҫыбыҙ!***

***Хөрмәтле дуҫтар!***

***1 февралдән 2013 йылдың икенсе яртыһына гәзит-журналдарға, шулай уҡ «Хазина»ға алдан яҙылыу кампанияһы бара.***

***Элекке хаҡтар менән яҙылыу иртәгә, йәки 31ендә тамамланасаҡ. Хаҡтар артҡансы өлгөрөп ҡалығыҙ!***

***Шулай ҙа, беренсе яртыйыллыҡҡа гәзитте алдырыу өсөн, һәр айҙың 20-һенә тиклем яҙылһағыҙ, «Хазина» һеҙгә киләһе айҙан килә башлаясаҡ.***

***Башҡорт телендә сыҡҡан район гәзите ҡушымтаһы менән 2013 йылда ла бергә ҡалайыҡ, ҡәҙерле уҡыусылар. Шулай уҡ «Хазина»ны яҡындарығыҙға, дуҫтарығыҙға, таныштарығыҙға, малай-ҡыҙҙарығыҙға яҙҙырып та уларҙы шатландыра алаһығыҙ.***

***Һеҙҙән, шулай уҡ, ауыл тормошо, тарихы хаҡында яҙылған хаттар, яҡын кешеләрегеҙгә ҡотлауҙар көтөп ҡалабыҙ.***

***“Хазина”ға ярты йылға яҙылыу хаҡы - 88 һум 44 тин. Индексы - 50713***

Татар халҡының бөйөк шағиры Ғабдулла Туҡайҙың вафат булыуына - 100 йыл

# Бәйге шиғриәт һөйөүселәргә дәрт, илһам өҫтәне

**Шиғриәтебеҙ аҡһаҡалы Ғабдулла Туҡайҙың ижады донъя кимәлендә танылыу яуланы. Уның үлемһеҙ шиғырҙарын бөгөнгө көндә һәр уҡыусы яттан белә. Бөйөк әҙиптең ижад емештәре илебеҙҙең төрлө телдәренә тәржемә ителгән.**

Татар һәм башҡорт халҡының бөйөк шәхесе Ғабдулла Туҡайҙың яҡты иҫтәлегенә арнап, уның исемен мәңгеләштереү маҡсатында ике күрше республикала төрлө мәҙәни саралар үткәрелә. Шуларҙың береһе - «Туҡай моңдары» исемле беренсе республика ижади конкурс-фестивалдең район туры 25 мартта 1-се Ҡариҙел урта мәктәбендә үткәрелде. Был иҫтәлекле сараны район мәғариф бүлеге методисы Г.Р.Нурисламова ойоштторҙо. Бында 12 мәктәптән килгән башҡорт, татар теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары һәм 30 Ғабдулла Туҡай ижадына битараф булмаған, шиғыр, йыр-моң һөйөүсе уҡыусы ҡатнашты.

Әҙәби кисәнең тантаналы өлөшөн Гөлсирә Рәхмәт ҡыҙы асып ебәрҙе һәм үтә лә йәнле итеп алып барҙы.

Ошондай күркәм сараны тейешле кимәлдә үткәреүҙә, программа ҡуйған бурыстарҙы тормошҡа ашырыуҙа сәхнә биҙәлешенең, видеотаҫманың, китаптар күргәҙмәһенең әһәмиәте ҙур. Ул уҡыусыларҙа тел һәм әҙәбиәткә, шиғриәткә, ижадҡа ҡарата ҡыҙыҡһыныу, һөйөү тойғоһо тәрбиәләй.

Район шиғыр һөйләүселәр бәйгеһенә педагогтар тәрбиәләнеүселәрен ҙур яуаплылыҡ менән әҙерләгән. Шуға ла бәйгеселәрҙең шиғырҙарын матур, тасуири итеп яттан һөйләп, Ғ.Туҡайҙың һүҙҙәренә яҙылған йырҙарҙы оҫта башҡарыуҙары жюри ағзаларын хайран ҡалдырҙы.Уҡыусылар бөйөк шағирҙың әҫәрҙәрен татар, башҡорт, рус һәм инглиз телдәрендә һөйләнеләр. Конкурс һөҙөмтәләре буйынса өс төрлө номинацияла еңеүселәр билдәләнде.

***«Туҡай һүҙе төрлө телдәрҙә» исемле шағирҙың әҫәрҙәрен яңғыҙ башҡарыусы номинацияһында ике мәктәп ҡатнашты:***

Был юлы сәхнәлә артистарса уйнаған, актерлыҡ һәләте булған Регина Ғайсина (Яугилде мәктәбенән), Альбина Усманова (Яңы Бәрҙәш) , Радик Мортазин (Ҡортлокүл) еңеп сыҡты. Шулай уҡ Бағаҙы мәктәбенең бишенсе класс уҡыусыһы Илвина Мәсәлимованың башҡорт телендә ятлаған «Шүрәле» шиғыры беренсе урынды яуланы.

Финалсылар араһында икенсе урынға - Данир Әбраров (1-се Ҡариҙел мәктәбе), Илина Ғәниәтова (Байҡыбаш), Диләүләтйәнова (2-се Ҡариҙел мәктәбе), ә өсөнсөгә - Хәлил мәктәбенең Далира Шәрифуллина, Уразайдан Илсур Ғәлимйәнов, Байҡы Юныстан Альбина Нартдинова лайыҡ булды.

***Ғ.Туҡайҙың әҫәрҙәрен ижади төркөм менән башҡарыу номинацияһында:***

Яңы Бәрҙәш мәктәбенең уҡыусылары Вилена Әкрәмова һәм Юлиә Сәйетова шағирҙың «Күбәләк» йырына әҙәби-музыкаль композиция сәхнәләштереп беренсе урынды алды.

Ә 2-се Ҡариҙел мәктәбенең унынсы класс ҡыҙҙары Гүзәл Шаһиева менән Регина Саяпова (етәкселәре Л.М.Хәсуллина) икенсе урынға лайыҡлы эйә булды. Улар оҙон «Шүрәле» шиғырын һүҙҙәрен яңылышмайынса инглиз телендә һөйләп ишеттерҙе.

***«Хәҙерге татар шағирҙарының әҫәрҙәрен яңғыҙ башҡарыусылар» номинацияһында:***

Был бәйгелә беренселекте ике егет бүлеште - Тайҡаш мәктәбенең һигеҙенсе класс уҡыусыһы Радик Закирйәнов «Китап» шиғырын ҙур оҫталыҡ менән башҡарҙы, шулай уҡ Байҡыбаштан килгән Азат Хафизов инглиз телендә ятлаған «Туған ауыл» шиғыры менән унан ҡалышманы.

Бына сәхнәгә Тигермән мәктәбе һылыуы Альбина Хәмәтдинова (етәксеһе Л.Ғайсина) күтәрелде. Ул Ғабдулла Туҡайҙың шиғырын татар телендә ятлаған. Ә 2-се Ҡариҙел мәктәбе ҡыҙыҡайы Мария Әнғәмова (етәксеһе Л.В.Белышева) «Шүрәле» шиғырын рус телендә һөйләп бирҙе. Улар берҙәй булып икенсе урын хужалары булды.

Яугилде мәктәбенән Эльвир Сафин, Хәлилдән Регина Солтаншина, Байҡы Юныстан Илнар Әхкәмов өсөнсө урын яуланы.

Әҙәби кисәнең аҙағында Гөлсирә Рәхмәт ҡыҙы еңеүселәрҙе ҡотланы һәм йомғаҡлау һүҙе менән сығыш яһаны:

- «Туҡай моңдары» исемле беренсе республика ижади конкурс-фестивален ойоштороусылар - Башҡортостандың Мәғариф министрлығы, Мифтәхетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институты һәм БР татарҙарының милли-мәҙәни автономияһы. Фестиваль йәш быуында үҙенең дәүләтенә, халҡына, милли йолаларына, ғөрөф-ғәҙәттәренә мөхәббәт тойғолары тәрбиәләүгә, уҡыусыларҙа халыҡсанлыҡ, илебеҙҙә төрлө милләт кешеләренең берҙәм йәшәүенә, артабан да ныҡлы дуҫлыҡ күпере һалыуға йүнәлтелгән, - тине ул.

Өфө ҡалаһында был байрам 26 апрелдә уҙасаҡ. Беҙ, район бәйгеселәренең республикала үткән ошо сарала ҡатнашып призлы урындар яулап ҡайтыуын, унда ла уларҙың һынатмауын теләп ҡалабыҙ.

**Л.Карамова.**

*Ә.Мөхтәсәров фотолары.*




Вилена Әкрәмова менән Юлиә Сәйетованың сығышы һәр кемдең күңеленә хуш килде.



Радик Мортазин.



Альбина Усманова.



Далира Шәрифуллина, Илсур Ғәлимйәнов, Альбина Нартдинова.



Гүзәл Шаһиева һәм Регина Саяпова.



Сарала әүҙем ҡатнашҡан малайҙар һәм ҡыҙҙар.



# Әҙәби бит

## Яҙ килде

*Яҙ, яҙ, яҙ килә,*
*Наҙлы ҡояш эй көлә.*
*Йомшаҡ елдәр сәләм әйтә,*
*Тышта нур, йәм бөркөлә.*

*Яҙ килеүен һиҙҙереп,*
*Тамсы тама ҡыйыҡтан.*
*«Ҡара ҡарғалар ҡайтты», – тип,*
*Хәбәр һалды һайыҫҡан.*

*Көс-гәйрәт алып ерҙән*
*Һыуҙар гөрләп ағалар.*
*Сыйырсыҡтар үҙҙәренең*
*Йыр-моңдарын һуҙалар.*

**Г.Мөхитова.**
*Яңы Йәнсәйет.*

## Көтмә әле

*(Иремдең йылын үткәргәндә яҙылған шиғыр)*

*И, ғүмерҙең бик шәп үтеүҙәре –*
*Килеп етте бына йылы ла:*
*«77 йәштә генә ине бары,*
*Түгел ине улай оло ла”.*

*Тормошто ул бигерәк һөйә ине,*
*Ике ҡулы бары эш “белде”.*
*Көтмәгәндә генә “китеп барҙы”,*
*Был аяуһыҙ яҙмыш ник көлдө?*

*Тыуған-тыума, дуҫ-иш йыйылдылар,*
*Иҫкә алып, Ҡөрьән уҡыла.*
*Хәйер өләшәбеҙ ысын күңелдән,*
*Шатлыҡ теләп изге рухына.*

*Һинһеҙ йәшәү – ысынбарлыҡ инде,*
*Мәңге эремәҫ боҙо, ҡары ла –*
*...Һағынам ла һине, көтмә әле,*
*Уйламайым да “унда” барырға.*

**Й.Солтанова.**
*Абдулла.*

## Ҡаршы ал, ауылым!

*Һағыштарға батып ҡайтып киләм,*
*Ҡаршы ал һин мине, ауылым!*
*Элеккеләй йәшел сиҙәм микән?*
*Бәпкә үлән микән урамым?*

*Муйылдар ҙа инде ҡаралалыр,*
*Бөрлөгән дә инде бешкәндер.*
*Ауылымдың уңған халыҡтары,*
*Бесәнгә лә инде төшкәндер.*

*Уйым менән көндә ҡайтып урайым,*
*Инеп сығам тыуған йортома.*
*Бала саҡты, бөтә туғандарҙы,*
*Атай-әсәйемде юҡһынам.*

**Г.Нәбиуллина,**
*Абыҙ.*

## Урал

*Урал, тиҙәр, Европаны*
*Азиянан айыра.*
*Айырамы, ҡуша микән –*
*Быны тарихтан һора.*

*Ғүмер баҡый ҡәбиләләр*
*Һәм халыҡтар күсенгән,*
*Уралды һис кәртә тиеп*
*Уйламаған, белмәгән.*

*Бер кемде лә Урал бүлеп*
*Ҡыйынлыҡ тыуҙырмаған.*
*Киреһенсә, ҡитғаларҙы*
*Берек터்ергән йөй булған.*

**З.Мурсиев.**
*Ҡариҙел.*

## Никах туйы

*Тарих төпкөлөнән беҙгә килгән*
*Ата-бабаларҙың ғәҙәте,*
*Никах уҡырға, тип йыйылалар –*
*Мөхәббәттең изге сәғәте.*

*Был һөйөүҙең бөйөк миҙгеле ис,*
*Күктәр яҙа никах ҡағыҙын.*
*Йыйылғандар бар ҙа иғтибарҙа –*
*Тыңлый шымып мулла вәғәзен.*

*Бер-беребеҙҙе беҙ һөйәбеҙ, Аллаһ,*
*Тип әйтергә баҙнат иткәндәр,*
*Ғүмерлеккә беҙҙе бәйлә, Хоҙай,*
*Тиеп Ҡөрьән битен үпкәндәр.*

*Икеһе лә улар һинекеләр,*
*Һаҡла һин уларҙы, йә Аллаһ,*
*Ҡайғы-һағыш бирмә һин уларға,*
*Бәхет юлын бүлмә һин алдан.*

*Туйҙарҙың да туйы – никах туйы,*
*Никахтары яңыра күптәрҙең...*
*Алдағыһы көндәр матур булһын,*
*Һөйөүлерәк үткән көндәрҙән.*

**Г.Тимершина.**
*Ҡариҙел.*

## Алтмыш яҙ - алмаҙ туй

*Ҡәҙим атлы бер егет*
*Тигермән ауылда үҫкән.*
*Илен һаҡлар өсөн үҫмер*
*Севастополгә киткән.*

*Хеҙмәттән ҡайтҡан был егет*
*Аҡ кителдәрен кейеп,*
*Ҡыҙҙарҙың күҙен ҡыҙҙырып,*
*Киткән ул клубта бейеп.*

*Рәмзиә унан ҡалышмай -*
*Институт бөтөп ҡайтҡан.*
*Өҙә баҫып бейегәндә*
*Егетте үҙенә ҡаратҡан.*

*Марттың егерме һигеҙе*
*Туй көнөнә әйләнде.*
*Ҡәҙим менән Рәмзиәнең*
*Сәсе сәскә бәйләнде.*

*Алтмыш йыл быйыл шул туйға -*
*Күпме һыуҙар аҡтылар.*
*Күпме яҙҙар үтеп китте,*
*Гөлдәр сәскә аттылар.*

*Әсеһен дә, сөсөһөн дә*
*Күрергә тура килде.*
*Ләкин улар бирешмәне -*
*Саф мөхәббәт көс бирҙе.*

*Иңгә-иң терәп үттеләр*
*Бер-береһен аңлап улар.*
*Дүрт ҡыҙ яратып үҫтерҙе,*
*Ейәндәр инде ҙурҙар.*

*Атай, әсәй, йәшәгеҙ һеҙ,*
*Беҙгә һеҙ бит бер терәк.*
*Аҡыллы кәңәштәрегеҙ*
*Һеҙҙең беҙгә бик кәрәк.*

*Улар хөрмәткә лайыҡлы,*
*Ти ауылдаштар ҙурлап.*
*Оҙаҡ йәшәгеҙ тағы ла*
*Бөтә донъяны нурлап.*

**Л.Сәйетғәлиева.**
*Абдулла.*

## Әсәйем иҫтәлеге

*Тәҙрә төбөм тамсы гөл –*
*Әсәйем иҫтәлеге.*
*Йырлай-йырлай һыу һипкәне,*
*Һаман да иҫтә әле.*

*Тамсы гөл – өйөм биҙәге,*
*Яратам гөлдәремде.*
*Улар миңә хәтерләтә*
*Әсәйле көндәремде.*

*Серҙәремде һөйләй-һөйләй,*
*Гөлдәремә һыу һибәм.*
*Әйтерһең лә тыуған өйҙә,*
*Әсәй менән серләшәм.*

*Тамсы гөлдәр үҫтерәм мин*
*Әсәйем иҫтәлеге.*
*Йырлай-йырлай һыу һипкәне*
*Һаман да иҫтә әле.*

**Ғ.Ғилманова.**
*Хәлил.*

## Ҡәкүк

*Алма, ҡәкүк, һүҙемде*
*Бер үк кенә ауырға:*
*Булһаң да һин изге ҡош,*
*Төшмә, зинһар, ауылға.*

*Ишеткәнем бар минең*
*Ҡарттар әйтеп килгәнен*
*Ҡәкүк ауылға төшһә,*
*Әфәт килә тигәнен.*

*Төшмә, ҡәкүк, ауылға,*
*Күкелдә урманымда.*
*Ғүмер юраусы тигән,*
*Сыҡҡан һинең даның да.*

*Юра ғүмер ауылыма,*
*Бәхетле, оҙондарын.*
*Гөрләтеп йәшәһен ул*
*Ҡариҙел үҙәндәрен.*

**Ф.Сафин.**
*Түбәнге Болмоҙо.*

### Өмөтлө ҡәләм



М.Әхкәмова.

**Миләүшә Әхҡәмова Байҡыбаш мәктәбенең 6-сы класс уҡыусыһы. Миләүшә яҡшы билдәләргә генә уҡый, мәктәп тормошо менән ҡайнап йәшәй. Ул моңло итеп йырлай, оҫта бейей. Ә буш ваҡытында шиғырҙар яҙа. Һеҙгә Миләүшәнең бер нисә шиғырын тәҡдим итәбеҙ.**

## Өләсәйем һаман иҫтә

*Илама, әсәй һәм апай,*
*Өләсәй булмағанға.*
*Уны күҙ йәше менән*
*Ҡайтарып булмай донъяға.*

*Ул беҙҙе бик яратты,*
*Аяҡҡа ла баҫтырҙы.*
*Ул йәшәргә өйрәтте*
*Һәм алға әйҙәп барҙы.*

*Уйҙарымдан, телдәремдән,*
*Һин китмәйһең, ҡәҙерлем.*
*Өләсәйем, өйрәттең һин:*
*«Тормоштоң бел ҡәҙерен».*

*Көндәр үтеп, һыуҙар аға,*
*Китмәйһең һин уйымдан.*

*Нисә тапҡыр төштәремдә*
*Һине күреп уянам.*

*Бына үтте ике йыл да*
*Һәм дә нисәлер айҙар.*
*Мәңге һине онотмайбыҙ –*
*Мин, әсәй һәм апайҙар.*

*Донъянан китһәң дә иртә,*
*Мәңге йәшәйһең йөрәктә.*
*Һинең биргән кәңәштәрең*
*Юл яра киләсәккә.*

## Әсәй, һине ҡотлайым!

*Әсәйем бөгөн бик шат,*
*Матур күлдәген кейгән.*
*Уға килгән бер ҙур хат,*
*Унда: «Ҡотлайбыҙ!», - тиелгән.*

*Әсәйемде ҡотларға*
*Бар туғандар ҡайтҡандар.*
*Өйөбөҙҙөң уртаһына*
*Ҙур табын да ҡорғандар.*

*Һигеҙенсе март көнөндә*
*Тыуған минең әсәйем,*
*Иң изге теләктәремде*
*Мин дә уға теләйем.*

*Эшеңдә булһын уңыштар,*
*Ғүмерең үтһен бәхеттә.*
*Донъябыҙға шатлыҡ бөркөп*
*Оҙаҡ йәшә эргәлә.*

*Һине ысын күңелдән*
*Миләүшә ҡыҙың ҡотлай.*
*Һинең йомшаҡ ҡулдарың*
*Бөгөн дә мине наҙлай.*

## Апайыма

*Эҙләһәң дә табып булмайҙыр ул,*
*Һинең кеүек яҡшы дуҫтарҙы.*
*Ҡулдан килһә, бүләк итер инек,*
*Күктә йөҙгән йондоҙ-айҙарҙы.*

*Тыуған көнөң менән ҡотлап һине*
*Тәбрикләйбеҙ ихлас күңелдән.*
*Оҙон ғүмер, шатлыҡ, ап-аҡ бәхет –*
*Изге теләктәрҙе ал беҙҙән.*

**Мөхәррир: Р.М.Ильясов**
Подписка индексы 50713.
Тиражы 415
**Редакцияның адресы:** 452360
БР, Ҡариҙел ауылы, Ленин урамы, 23.
**Адрес: ГУП РБ РИК “Караидель”**
452360 РБ, с.Караидель, ул.Ленина, 23.
**Һатыуҙа хаҡы ирекле.**

**“Хазина”**- “Караидел” гәзите ҡушымтаһы.
Ойоштороусылары:
Башҡортостан Республикаһының Элемтә һәм киң коммуникациялар министрлығы.
**БР “Караидел”** РНИК ДУП.
2003 йылдан алып, айына ике тапҡыр сыға.
**Сығарылыш өсөн**
**Люция Карамова яуаплы.**

**Телефондар:**
мөхәррир - 2-13-00,
мөхәррир урынбаҫары - 2-16-75,
яуаплы сәркәтип - 2-15-86,
факс - 2-13-00, 2-12-14, 2-16-49.
**Беҙҙең электрон почта:**
e-mail: karred@mail.ru
http://karaidel. pressarb. ru.

**БР “Бөрө ҡала типографияһы” дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.**
Подписка буйынса таратыла.
Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 30.03.13.10.00.
Ҡул ҡуйылды - 30.03.13.10.00.
© **“Хазина”,** №6 март, 2013.
Күләме - 1 баҫма табак.
Заказ № 1156

**Демография**

## *РФ Президенты Владимир Путин:*

# «Күп балалы ғаилә ҡабаттан Рәсәй символына әүерелергә тейеш»

***(Башы 1-се биттә.)***

Президент билдәләүенсә, һуңғы йылдарҙа тыуымдың әҙме-күпме үҫеүгә барыуы Рәсәй ғаиләһенең килеме артыуы тураһында ла һөйләй. Был, тимәк, киләсәктә лә граждандарҙың эш хаҡтарын арттырырға, юғары хеҙмәт хаҡы түләрлек эш урындары булдырырға кәрәк тигәнде аңлата.

Йәнә лә һандарға туҡталайыҡ. Беләһегеҙҙер, бала тыуғас та бер тапҡыр түләнә торған пособиеның суммаһы 13 мең һумдан ашыу. Йөклөлөк һәм бала табыу буйынса пособие күп осраҡта ҡатындың һуңғы ике йылдағы эш хаҡының 100 процентын тиерлек тәшкил итә. Әммә был сумма 40,6 мең һумдан артырға тейеш түгел. Бынан тыш, демография хәле ҡырҡыу торған 50 төбәктә быйылдан федераль бюджеттан өсөнсө һәм унан һуң тыуған балаларға өҫтәмә пособие түләү ҡарала. Был уртаса 6-7 мең һум булыр. Йәнә лә 13 төбәктә урындағы бюджет иҫәбенә ошондай пособие түләнәсәк.

Владимир Путин әсәлек капиталына ҡарата ла фекерен белдерҙе. Быйыл әлеге сумма 408 мең һумға еткән. Ул үҙ һөҙөмтәлелеген күрһәтә бара. Әммә 2016 йылда программаны тормошҡа ашырыу тамамлана. Рәсәй Президенты әйтеүенсә, артабан беҙ бергәләп был программаны 2016 йылдан һуң да оҙайтыу яйын табырға тейешбеҙ.

Торлаҡ мәсьәләһе - демографияға туранан-тура йоғонто яһаусы фактор. Был юҫыҡта ил етәкселеге төбәктәргә проблеманы хәл итеү юлдары күрһәткән тәҡдимдәр әҙерләргә ҡушты.

Бала ҡарау буйынса декрет ялында ултырыусы әсәләргә булышлыҡ итеү ҙә — көн талабы. Бында әсәнең бала ла ҡарарға, эшләргә лә теләге булыуынан сығып хәл итергә кәрәк. Йыш ҡына әүҙем әсәләр уңайлы көн тәртибе буйынса ваҡытлыса эшләүҙе хуп күрә. Был ғаилә бюджетына ярайһы өлөш индерә. Бәғзеләр юҡлыҡтан, аҡса етешмәүҙән тиҙерәк эшкә сығырға теләй.

РФ Дәүләт Думаһы беренсе уҡыуҙа мәшғүллектең дистанцион формаларын билдәләп, Хеҙмәт кодексына үҙгәрештәр индереүҙе ҡараны. Путин депутаттарға был заклнды мөмкин тиклем тиҙерәк ҡабул итергә ҡушты. Ғөмүмән, йәш әсәләрҙең һөнәри квалификацияһын күтәреү ҙә әһәмиәтле мәсьәләгә әүереләсәк. Был тәңгәлдә төбәктәр етерлек аҡса бүлергә бурыслы ине. Әммә ҡайһы бер субъекттар быны ғәмәлдә насар үтәгән. Хатта, Владимир Владимирович әйтеүенсә, был маҡсатҡа йылына бер кешегә ни бары 10 мең һум түләгән төбәктәр ҙә булған.

Ултырышта ҡаралған тағы бер мәсьәлә — балалар баҡсаларында урын етешмәүе. Был проблеманы хәл итеүҙә дәүләт мәктәпкәсә учреждениелар төҙөү генә түгел, ә шәхси балалар баҡсалары һанын үҫтереүгә лә булышлыҡ итәсәк. Мәҫәлән, әле Мәскәү, Һамар өлкәләре, Пермь крайы баҡсаға сиратты байтаҡҡа ҡыҫҡартһа, Курск, Орел һ.б. өлкәләрҙә хәл яҡшынан түгел.

**Әйткәндәй**

*Кәңәшмәлә бала көткән ҡатындарҙың һаулығын һаҡлауға бәйле тема күтәрелеп, уға етди урын бирелде. Беҙ илдә әсә һәм сабый үлемен ҡыҫҡартыуға өлгәшкәнбеҙ. Был бигерәк тә перинаталь үҙәктәр, яңы бала табыу йорттары төҙөлгән төбәктәрҙә асыҡ күренә. Тимәк, һығымта яһарға мөмкин.*

*Барығыҙға ла билдәле — күп ерҙә оптималләштереү һылтауы менән фельдшер-акушерлыҡ пункттары ябылған. Ә, Президент белдереүенсә, һаулыҡ һаҡлауҙы модернизациялаған осорҙа быны киреһе, йәғни медицина ярҙамы селтәре киңәйергә тейеш ине. Артабан граждандарға уңайлы булған ҡарарҙар ҡабул ителһен өсөн тырышырға кәрәк. Был юҫыҡта ил Хөкүмәтенә ҡала халҡын ғына түгел, ауыл халҡын да кәрәкле медицина хеҙмәтләндереүе менән тәьмин итеүҙең критерийҙарын билдәләргә ҡушылды.*

# Изгелеккә өйрәтә



**Байҡы Юныс ауылында Мәүлит айы уңайынан бик матур сара булды. Был көндө мәсеткә йәштәр ҙә, оло кешеләр ҙә килгән ине. Байрамды ойоштороуҙа урындағы ауыл советы ауыл биләмәһе хеҙмәткәрҙәре, мәктәп, балалар баҡсаһы коллективтары ярҙамлашты.**

Кисә Ҡөрьән аяттарын уҡыу һәм доға менән башланды.

Тәүҙә Ғаяз Хәфизов йыйылған халыҡ алдында сығыш яһаны. Ул мосолмандарҙы, ауылдаштарҙы байрам менән ҡотланы. Унан һуң ауыл мәсетенең имам-хатибы Тәфкил Шәймиев вәғәздәр һөйләне, Ҡөрьәндән сүрәләр уҡыны, салауаттар әйтте. Ауылдың ағинәйҙәре Сания Ғәлимйәнова, Фәниә Әхҡәмова, Фәймә Хәкимова бик күркәм итеп мөнәжәттәр башҡарҙылар. Сажиҙә, Лотфия, Нәсимә Ғәлимйәновалар, Әлфинә Фаузова, Рәзифә Ғәниәтова, Зөһрә Хисмәтова, Ғәҙелиә Ғәлиева кеүек йәштәр ҙә мөнәжәт әйтеү буйынса уларҙан ҡалышманы.

Артабан районда килгән имам-мөхтәсиб Рәүҙәт Ғәйбазов Ҡөрьән сүрәләре, вәғәздәр уҡыны.

Байрам аҙағында мәктәп ашнаҡсылары Лариса Риянова менән Татьяна Нартдинова бешергән тәмле милли ризыктарҙан әҙерләнгән сәй табыны артында һүҙебеҙҙе дауам иттек. Ауылдаштарыбыҙ исеменән табынды әҙерләшкән Рәлиә менән Нуриә Ғәниеваларға һәм ярҙам ҡулы һуҙыусыларҙың барыһына ла рәхмәт белдергем килә.

Бындай саралар һәр кемдең йәшәйешенә, ғаиләһенә ыңғай тәьҫир итә. Дин ғилеме мосолман ҡәрҙәштәргә иманға килеп, Аллаһ биргәндәргә шөкөр итеп, тыйғандарынан тыйылып йәшәргә өйрәтә.

Барыбыҙға ла Хоҙайым хәҙерге һәм киләсәк тормошта бәхетле оҙон ғүмер, изге юлдар, бәрәкәтле малдар насип әйләһә ине.

**Ғ.Туктағолова,**
*хеҙмәт ветераны.*

# Хәҙистәр

¤ ***Ата-әсәңә изгелек ҡылһаң, ғүмерең оҙон булыр.***

¤ ***Халҡына һәм милләтенә хеҙмәт итеүсе кеше бәхетле.***

¤ ***Бер-берегеҙ менән күрешегеҙ - күңелдәрегеҙҙән кер китер.***

¤ ***Кесе йәштәге өлкәнгә, уҙып барыусы - ултырыусыға, аҙ халыҡ күп халыҡҡа башлап сәләм бирергә тейешле.***

¤ ***Хатҡа яуап ҡайтарыу - сәләм ҡайтарыу кеүек үк.***

¤ ***Хәйерле эшкә өндәүсе - уны эшләүсегә бәрәбәр.***

¤ ***Башҡаларҙан ғибрәт алған кеше - бәхетле.***

¤ ***Ҡәнәғәт була белеү - ҙур байлыҡ.***

**Клуб уттары**

# Күңелдәргә йылылыҡ өҫтәй, киләсәккә өмөт уята

## *Тамашасылар артистарыбыҙҙың һәр сығышын көтөп алды, көслө алҡыштарға күмде*



Баянсы Ҡәнәфи Ҡҙрасов.



Фәрдүс Фәзлинуров йырлай.

**8 Март көнө һәр ауылда, һәр йортта тиерлек үҙ ҡыҙыҡтары, үҙ йолалары менән байрам ителә. Моғайын, был көндә күп ир-егет гүзәл заттарға сюрприздар, бүләктәр эшләмәй ҡалмағандыр.**

Ғәҙәттәгесә, Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнө алдынан Ҡараяр мәҙәниәт йорто гөрләп торҙо. Бында ир-егеттәр гүзәл заттарға арналған иҫ киткес матур, юғары кимәлдә әҙерлек менән байрам кисәһе үткәрҙе. Ҙур концерт программаһын сәхнәлә генә түгел, шәхси тормошта ла күптәргә өлгө күрһәтерлек абруйлы егеттәребеҙ Раил Ниғәмәтйәнов менән Мәжит Сафуанов алып барҙы.

Концерт барышында Илдар Мөғәлимов, Фәнәүи Сафин, Айрат Мәүлимшин тамашасыларға популяр башҡорт халыҡ йырҙарын тәҡдим итте. Ә бына 75 йәшлек аҡһаҡалыбыҙ Фәрдүс ағай Фәзлинуров әсәйҙәр тураһында йырҙарҙы айырым бер эске тойғо менән яңғыратты. Ул үҙе өҙҙөрөп гармунда уйнай, шәп йырсы. Хөрмәтле ветераныбыҙ үҙенсәлекле моң эйәһе булараҡ ауылдаштарына күптән таныш. Унан һуң Ҡәнәфи Ҡҙрасов баян оҙатыуында моңло йырҙарын бүләк итте. Үҙәккә үтеп, йөрәктәрҙе елкендерерлек йырҙарҙы, үткән быуаттың 70-се йылдарында яратып тыңлап үҫкән быуын вәкилдәре генә түгел, залда ултырыусы йәштәр ҙә оҡшатты. Улар хатта дәррәү алҡышлап, үҙешмәкәр артистарыбыҙҙы «бис”ҡа саҡырып сығарҙы.

Алексей Орлов “Ауылдан хат” тип исемләнгән әҙәби-музыкаль композицияны сәхнәләштереп, нәфис һүҙҙәр һөйләп залдағыларҙы туйғансы көлдөрҙө. “Тренер” тигән скетчта ҡатнашҡан Фәнәүи Сафин, Нәфис Ибатуллин, Айҙар Мозафаров ролдәрен бик оҫта башҡарҙы. Йәш йырсы Денарис Денисламов башҡарыуында дәртле йырҙар тамашасы күңеленә айырыуса хуш килде.

Йырҙар бейеүҙәр менән аралашып барҙы. Бейеүсе егетебеҙ Илдар Мөслимовтың сығышы концерттың бәҫен бермә-бер күтәреп ебәрҙе. Шуныһы ла һоҡландыра: сәхнәлә сығыш яһаусылар менән тамашасылар араһында шул тиклем яҡынлыҡ һиҙелә ине. Сөнки хәҙерге ваҡытта бигерәк тә танһыҡ булған баян, гармун тауыштары күптәрҙең күңелен наҙлағандыр.

Был концерт хаҡында әллә күпме йылы һүҙҙәр әйтергә була. Егеттәрҙең гүзәл заттар өсөн әҙерләгән концерты уңышлы булды. Киләсәктә лә ир-егеттәребеҙ яҡын кешеләрен һөйөндөрөүҙән туҡтамаһын тигән теләктә ҡалам.

Байрам һуңында ошо күркәм сараны ойоштороуҙа ҙур өлөш индергән клуб хеҙмәткәрҙәре Әнфисә Сәйетғәлиева менән Рәшиҙә Саҙретдиноваға ауылдаштары, шулай уҡ ҡатнашҡан артистар рәхмәт һүҙҙәрен еткерҙе һәм 8 Март көнө менән ҡотлап гөлләмәләр тапшырҙы.

**Р.Ғилмийәрова.**
*Автор фотолары.*




Ир-егеттәр байрам алдынан гүзәл заттарҙы ысын күңелдән тәбрикләне.